## ≫ Анонсы



*Современные дети. Что не так в их воспитании?*
*стр. 2*



*Үҙенсәлекле музей*
*стр. 3*



*Хәтер*
*стр. 4*


*Бергә һәм берҙәм булайыҡ!*

Март 2017. № 4

# МИЛЛӘТ НУРЫ

ОБЩЕСТВЕННО-НАЦИОНАЛЬНОЕ ИЗДАНИЕ БАШКИР ЯМАЛО-НЕНЕЦКОГО АВТОНОМНОГО ОКРУГА


## ≫ Новости

### ЛЫЖНЯ ДРУЖБЫ В ВЫНГАПУРОВСКОМ



В Ноябрьске, в микрорайоне Вынгапуровский, впервые прошел турнир «Лыжня дружбы-2017». Организовала его местная мусульманская религиозная организация «Нур» при поддержке администрации города.

В забегах приняли участие башкиры, татары, русские, украинцы, белорусы, представители народов Северного Кавказа, Средней Азии. Всего 50 человек детей и взрослых.

Победителям и призерам «Лыжни дружбы» вручили кубки, медали и грамоты. После состязаний в мечети провели чаепитие.

Спонсором соревнований выступил Руслан Ямангулов, генеральный директор ООО «Эко-Сервис».

### НА ЯМАЛЬСКОМ КОНКУРСЕ ВЫСТУПИЛА УРОЖЕНКА БАШКОРТОСТАНА ИЗ АВСТРИИ



В Ноябрьске на открытом конкурсе молодых исполнителей «Дорогами поколений» выступила Анна Васильева, уроженка Уфы, ныне жительница Вены, столицы Австрии.

Девушка родилась в семье рабочих. Всю жизнь занималась спортом, закончила факультет физической культуры в педагогическом университете имени Акмуллы. После окончания университета Анну пригласили на Мальту преподавать в школе-пансионате. Позже девушка приняла решение учиться в магистратуре в Австрии по направлению «социальное здоровье и спорт». Очень тесно общается с соотечественниками. В Австрии на международном форуме «Мир во всем мире» познакомилась с представителями делегации Ямало-Ненецкого автономного округа. Они и пригласили Анну поучаствовать в конкурсе вокалистов в Ноябрьске. О Ямало-Ненецком автономном округе девушка знает давно, еще от своих друзей по университету. Многие члены ее студенческой команды были из Муравленко и Когалыма.

Вокалом и театральным искусством Анна увлекается с детства. На конкурсе она исполнила две песни - «Офицерские жены» и «Мой Башкортостан». Первая песня посвящена судьбе женщин, которые ждут мужей-защитников Отечества. Вторую песню, как рассказала Анна, она решила исполнить из-за любви к родине. Девушка сильно тоскует по Башкортостану.

Жюри оценило выступление австрийки с башкирскими корнями. Анна Васильева стала дипломантом конкурса.

### ИГРОК «САЛАВАТА ЮЛАЕВА» - САМЫЙ ПЕРСПЕКТИВНЫЙ ХОККЕИСТ В МИРЕ

Российский нападающий «Салавата Юлаева» и сборной России Кирилл Капризов возглавил рейтинг самых перспективных молодых игроков 2017 года по версии американского издания «The Hockey News».

В текущем сезоне КХЛ 19-летний Капризов провел 54 матча за «Салават Юлаев», в которых забросил 23 шайбы и сделал 22 результативные передачи.

В пятерку лучших вошли Филипп Майерс («Филадельфия»), Джордан Гринуэй («Миннесота»), Томас Чабот («Оттава») и Брэндон Монто («Анахайм»).

## ≫ Соплеменники

# ОСТАВЛЯЯ СЛЕД ДОБРОТЫ И МИЛОСЕРДИЯ

***Не только многим ноябрянам, но и ямальцам, и башкортостанцам наверняка будет интересно узнать, что благодаря именно этому человеку в 2004 году возобновил маршрут пассажирский поезд Уфа - Новый Уренгой. До того момента сотни тысяч человек вынуждены были добираться из Ямала в Башкортостан и обратно с несколькими пересадками. Только одному этому человеку известно, сколько энергии и сил, сколько встреч в кабинетах различных инстанций Уфы и Москвы необходимо было, чтобы убедить высоких чиновников в важности и необходимости такого маршрута. И это большое дело не принесло ему ни копейки. Раньше он жил в Ноябрьске, сейчас в Уфе, зовут его Анур Хурматович Загидуллин.***



*Анур Загидуллин и Мухаммад Мансуров, имам-хатыб мечети г. Ноябрьска*

Другое большое дело, которое не забыть жителям Ямала – строительство мечети Ноябрьска. Именно Анур Загидуллин, будучи председателем попечительского совета по строительству, больше всех в Ноябрьске вложил сил и энергии в возведение мусульманского храма. Соборная мечеть – достопримечательность города. Мусульмане и гости мечети, в том числе из стран ближнего и дальнего зарубежья - из Канады, Австрии, США, Австралии, Голландии - не скрывают своего восхищения, глядя на здание.

Про таких, как Анур Хурматович, говорят «человек старой, советской закалки», имея в виду твердость характера, целеустремленность, принципиальность. Сам он признает, что воспитан в духе советского человека. Соответственно, он в молодости, да, пожалуй, и в пожилые годы мало имел отношения к исламу. Тем не менее, события в его жизни часто напоминали ему, что жизнь человека протекает в соответствии с предопределением, и что добро, совершенное тобой, непременно вернется.

- Помню, однажды, в послевоенное, голодное время, когда я был ещё совсем юный, было мне около 13-14 лет, запряг в сани корову и пошёл в лес за дровами. По дороге началась метель, ничего не видно, кое-как загрузил в сани дрова. Метель мела всё сильнее. Шли домой по бездорожью. Вдруг корова упала в яму, сани перевернулись. Я оказался под дровами. Было страшно умереть от холода под снегом. В отчаянии я закричал на корову. Она испугалась и резко дёрнулась вперёд, чем и спасла меня. Она вытащила меня из–под кучи дров. Хлестая кнутом, я криками сумел заставить корову вылезти из ямы. Мы пошли домой. Дрова и сани, конечно же, оставил на месте. В тот момент у меня зародилась мысль - когда вырасту, встану на ноги, буду помогать нуждающимся. Столько времени прошло, но я не могу забыть эту историю, - вспоминает Анур Хурматович.

Анур Загидуллин работал простым слесарем-монтажником. Поступил в Казанский химико-технологический институт им. Кирова. Окончил его, работал монтажником, мастером, затем - прорабом, главным инженером. Однажды, во время отпуска, когда приехал в родной аул, познакомился с красивой девушкой Галей. Вспыхнула любовь, и совсем скоро молодые сыграли свадьбу. Жених увез невесту в Казань. В Казани у них родились сын и дочь...

Давно уже дети Анура Хурматовича сами стали папой и мамой. Они регулярно навещают родителей. О своей жене Анур Хурматович и сейчас отзывается тепло, а каждый праздник дарит любимой цветы и подарки.

- Я благодарен судьбе, что на моём пути встретилась Галя. Её искренность, доброжелательность всегда вдохновляли меня на большие дела. А как она вкусно готовит! Если бы на ее месте была другая, то, возможно, не было бы в моей жизни таких достижений, – откровенно признается он.

Друзья уважают, земляки гордятся, что ещё нужно человеку? Анур Хурматович до недавнего времени возглавлял строительство второй очереди ноябрьской мечети. Являлся председателем регионального духовного управления мусульман Ямала. В преклонном возрасте сумел совершить хадж. Сейчас помогает сыну управляться большим сельскохозяйственным комплексом в Ишимбайском районе.

- Я общественник до мозга костей, - любит говорить Анур Загидуллин. Это не просто красивые слова. Заслуги его перед гражданами страны отметил лично Владимир Путин. Три года назад Президент наградил ямальца Орденом дружбы.



Ещё интересный факт - за какое дело бы ни взялся Анур Хурматович, всё получается, никогда не бросает начатое. Действительно, это дано не каждому.

Он искренне верит в то, что дорогу осилит идущий, а сам он оставляет за собой след доброты и милосердия.

*Бурангул ГАЛИН*

≫ Национальный интерес

# СОВРЕМЕННЫЕ ДЕТИ. ЧТО НЕ ТАК В ИХ ВОСПИТАНИИ?

***Я часто вспоминаю свое детство. И как педагог отмечаю для себя, что то было замечательное время в том плане, что родители воспитывали нас на личном примере. Взрослые ответственно относились к своему поведению, не позволяли материться при детях, употреблять спиртные напитки, вести иждивенческий образ жизни. Мужчины, даже если разводились, оставались отцами своим детям и помогали воспитывать и содержать ребенка.***



*Гульфира Мусина*

Почему же сегодня все поменялось? Мы не можем, не хотим заниматься воспитанием ребенка. Бытует мнение, что это изменились времена. Они и правда другие, но в этом ли дело? А может быть, в нас самих?

Наша память очень избирательна и необъективна, она хранит самые главные и важные составляющие детства, которые сделали нас теми, кто мы есть, но которых подчас лишены наши собственные дети.

Основные качества, которые воспитывались нашими родителями – это уважение, уважение не только к своим близким, но и к окружающим людям. Главная ошибка сегодня: мы не стесняемся обсуждать при своих детях своих свекровей, коллег по работе, пожилых соседок, родителей одноклассников и – с особым упоением – учителей. Таким образом, сами того не замечая, нарушили очень важные принципы в жизни, для восстановления которых, возможно, потребуются многие годы.

Следующее качество – это самостоятельность, мы рано становились самостоятельными. У нас с детства было очень много обязательств по домашнему хозяйству, и досуг свой (содержательный) организовывали сами, и не было постоянного родительского контроля, чтобы целыми часами «висеть» на телефоне и контролировать своего ребенка и подсказывать каждый шаг. К сожалению, современные родители стараются держать все под контролем, а потому и дети стали очень зависимыми и ведомыми, довольно редко они принимают самостоятельные решения.

Много времени уделялось в воспитании привитию такого качества, как доверие. Доверие было основополагающим понятием во взаимоотношениях людей, причем не только близких. Прежде всего – государство доверяло родителям как людям, которые любят своих детей и желают им только добра. Удивительно, но в наше время (это 70-80-е годы) не было понятия «семья, находящаяся в социально опасном положении», а наоборот, семья как раз и была самой надежной защитой для ребенка. Мы доверяли своим друзьям, соседям, учителям и врачам. Мы сегодня все становимся подозрительными, скептичными, в детях своих развиваем понятия «выжить», «пробиться любыми способами», добиться успеха, и тем самым сеем в них равнодушие, тревожность. Перегрузки и строгие требования в школе, страх не оправдать чаяний дорогих людей, безостановочная гонка за успехом, да и собственные высокие притязания – напряжение, которое не всякому взрослому по плечу. В связи с чем в современном мире участились подростковые суициды. Зависимость между подростковыми депрессивными расстройствами и прессингом успеха подтверждает ежегодный всплеск молодежных самоубийств после объявления результатов вступительных экзаменов. Нам с вами, уважаемые читатели, стоит задуматься, не слишком ли высока цена даже за самые блестящие перспективы. На мой взгляд, наступило время восстановить доверие между родителем и ребенком, и дать ему возможность самореализоваться с учетом его личностных возможностей, и не гоняться только за материальным благополучием, иначе растеряем мы с вами самое основное - духовную ценность и эмоциональное благополучие.

Следует добавить также, что и бескорыстие, которое было в нас, становится редкостью. Помогать нуждающимся бескорыстно - не модно, мы воспитываем в детях корысть, якобы, нашим миром правят деньги. Мы делаем все, чтобы наши дети знали цену деньгам: материально поощряем выполнение домашних поручений, хорошие оценки, а иногда – и хорошее поведение. И удивляемся, когда видим, что многие дети отказываются помогать родителям, не поддерживают отношения с близкими родственниками, и всегда ожидают материального вознаграждения.

Таким образом, можно с уверенностью сказать, что мы с вами наблюдаем кризис и разрушение института семьи, семейных ценностей. Возможно, что наши дети не смогут вспомнить, какое замечательное было у них детство.

Современная статистика неумолима, за год число пар, желающих связать себя узами брака, на Ямале сократилось на 200. При сопоставлении количества браков и разводов за один и тот же промежуток времени в ЯНАО на 947 браков приходится 719 разводов. Путем простых расчетов вырисовывается очень печальная цифра – 76% браков в округе распадаются. Это происходит и в г. Ноябрьске.

Мы, взрослые, которые имеют свои семьи и воспитывают детей, также причастны к этому общему делу – привитию ценности семьи, возрождению семейных традиций, воспитанию уважения, укреплению доверия, развитию духовно-нравственных качеств в нас самих и привитию их нашим детям.

На сегодняшний день государство уделяет много времени и сил для того, чтобы восстановить институт семьи, развивает социальные учреждения, которые направлены на оказание помощи семье. Самое главное, - своевременно обратиться за помощью к квалифицированным специалистам и решать имеющиеся проблемы в воспитании ребенка, обучиться навыкам эффективного общения и взаимодействия в семье.

Одним из таких учреждений в нашем городе является муниципальное бюджетное учреждение «Комплексный центр по работе с детьми и молодежью «Перспектива». Направления деятельности учреждения доступны для всех категорий населения. На современном этапе учреждение осуществляет деятельность как в рамках организации досуга детей, подростков, молодежи, семей с детьми по месту жительства, так и оказывает на бесплатной основе социально-психолого-педагогическую помощь несовершеннолетним и родителям по различным проблемам. Основная задача учреждения - это предупреждение семейного неблагополучия, безнадзорности и правонарушений среди несовершеннолетних. Психологи и специалисты по социальной работе с молодежью, работающие в центре, решают круг задач, направленных на гармонизацию детско-родительских отношений, оказание помощи супругам в установлении взаимопонимания и поддержки друг друга, повышение психолого-педагогической грамотности по возрастным особенностям детей и подростков. Кроме того, проводят диагностику личностных особенностей, на выявление стиля воспитания в семье, по профориентации несовершеннолетних и др.

Уважаемые родители, самое главное, не надо бояться, необходимо решать возникающие трудности. Если Вас сопровождают внутренние страхи и сомнения, или же возникли сложности в вопросах воспитания ребёнка, не бойтесь обращаться к специалистам. Сохранение семьи и воспитание счастливого ребенка – это очень трудоемкий процесс, и этот успех зависит от нас самих.

Дополнительную информацию о службе помощи детям и семьям можно получить по телефону 39-82-03, 39-80-94 и на официальном сайте в сети Интернет по адресу: http://noyamolod.ru.

*Гульфира МУСИНА*

≫ Ислам

# КРАТКИЙ АНАЛИЗ «ГРОЗНЕНСКОЙ ФЕТВЫ»

***Грозненская конференция, которая прошла в конце августа прошлого года, - по моему мнению, событие, представляющее первый шаг в процессе самоочищения Уммы. За конец прошлого и начало нынешнего века исламская община как России, так и всего мира пережила сильнейшие потрясения. В итоге кажется, что появился риск разрушения устоев, на которых веками, со времен пророка Мухаммада, мир ему, зиждился мусульманский уклад жизни. Но лично я всегда верил, что кроме как на сотрясение воздуха и вовлечение в свои ряды, относительно незначительного количества суннитов сектанты ни на что не способны. И дело не в их немощности, а в обещаниях самого Всевышнего, что Ислам будет существовать до Конца света.***

Первая мысль, выраженная в грозненской фетве - утверждение, что к Ахлюсунна уаль джамаа относятся приверженцы акыды, выраженной имами Ашари и Матуриди, да будет доволен ими Аллах. «1) Ахль ас-Сунна ва аль-Джама'а в части Имана являются аш'аритами и матуридитами». Убеждение данной группы мусульман можно выразить в их приверженности принципу избегания комментариев атрибутов Всевышнего с одной стороны, и к использованию комментариев к атрибутам, если существует в том необходимость.

Вторая мысль – приверженность Ахлюсунна уаль джамаа к одному из четырех общепризнанных школ религиозной практики. «2) в части покорности Аллаху они являются последователями четырех мазхабов: ханафитского, маликитского, шафиитского и ханбалитского». Значит это, что сунниты для практики религиозных предписаний обязаны придерживаться выработанных учеными правил. Мусульманин не имеет право, например, самостоятельно вырабатывать порядок развода между мужем и женой.

Третья мысль – лояльное отношение к суфиям, суфийским практикам. «3) в части Ихсана — суннитами являются те, кто следует по пути нравственного самосовершенствования, указанного великими учителями, прежде всего, имамами суфиев Абу аль-Касимом Аль-Джунайди бин Мухаммад аль-Багдади, Абдуль-Кадиром аль-Джиляни, Мухаммадом Хаваджи Бахауддином ан-Накшбанди и подобными им праведными наставниками». Суфизм – это школа духовного самосовершенствования. Практически все великие имамы мусульман были суфиями или положительно отзывались о суфизме.

По большому счету, все три тезиса общеизвестны испокон веков. Иронией является то, что необходимо сегодня напоминать о них самим мусульманам. Но на то существует серьезная причина. В данной статье я буду говорить о российских мусульманах, не затрагивая причин невежества приверженцев Ислама в других странах. Как всем известно, в нашей стране на протяжении семидесяти лет господствовал атеизм, то воинствующий, то более мягкий по отношению к своим врагам, к коим относились и имамы. Было уничтожено несколько поколений мусульман, носителей ортодоксального ислама. Сказать, что идеи ваххабизма не были известны в среде мусульман – неправильно. Например, одним из проповедников идей Ибн Таймии на территории Поволжья был Риза Фахретдин. Но данный факт не может быть предметом спекуляций, поскольку сектанты среди мусульман присутствовали всегда. Господствующей мусульманской идеей в любом случае оставался ортодоксальный ислам, который еще называют традиционным. С конца восьмидесятых до начала нулевых годов в страну хлынул мощнейший информационный поток ваххабитской идеологии. Противостоять ему было некому.

В акыде сектанты близки к антропоморфизму. Не было бы проблем, если бы они, как и Ахлюсунна уаль джамаа, отказались от трактовок, но они идут дальше и начинают рассуждать о значении слов, смысл которых известен только Всевышнему. И поэтому стоят в шаге от уподобления Аллаха творениям. В фикхе ваххабиты известны своим принципом безмазхабности. То есть они отвергают 4 школы фикха в принципе. При этом утверждают, что поступают как праведные сподвижники пророка Мухаммада, мир ему. И в очередной раз совершают ошибку, поскольку, во-первых, сравнивают себя с людьми, которые воочию видели посланника Аллаха, мир ему. Во-вторых, сподвижники как раз таки и основали мазхабы-школы. Из них преподавали не каждый, а только самые грамотные. Что касается суфизма, то ваххабиты проявили себя как враги представителей тасаввуфа. Целями их терактов чаще всего становятся именно суфии. При этом они говорят о суфизме великих имамов Уммы, которых признают сами, как о чем-то мифическом, чего сегодня уже нет.

Фетва словно лезвие ножа отделила от Уммы ваххабитов и их друзей. Принятие документа муфтиями России - уникальный акт. Он выносит обвинения сектантам и указывает их место. А место им то же, что и другим сектантам – сидеть тихо. При этом проявление насилия в их отношении недопустимо, поскольку унижение мусульман, а вера ваххабитов никоим образом не оспаривается, запрещено Шариатом.

Несмотря на все страдания мусульман, которые произошли по вине сектантов, есть от них и польза. После открытия границ и наплыва в нашу страну эмиссаров салафизма стало понятно, как невежественны мусульмане. Коммунистическая деятельность имела серьезные последствия для Уммы. Но именно после того, как ваххабиты начали в России свою миссионерскую деятельность, мусульмане начали изучать Ислам, и в частности вопросы вероубеждения.

*Руслан АКЧУЛПАНОВ*

≫ Йәдкәр

# «ҠОЯШ ЙОРТО» НДАҒЫ ЙЫЛЫ ОСРАШЫУ

***Ноябрьск ҡалаһының «Ҡояш йорто» этнография комплексында Ямалдың төп халҡы - ханттарҙың йәшәйешен, тормошон сағылдырған күргәҙмә эшләй. Күптән түгел беҙ унда булып, Октябрина Ҡытым ҡыҙы Агичева менән осрашып һөйләштек. Ул 1949 йылда тыуған, әлеге ваҡытта Тарко – Сале ҡалаһында йәшәй. Атаһы Андрей Андреевич, тирә – яҡта билдәле һунарсы, балыҡсы була. Бынан тыш күпләп боландар аҫырай, ә олатаһы кешеләрҙе төрлө сирҙәрҙән дауалаусы халыҡ табибы була. Репрессия ҡорбаны.***



*Үҙ милләтенең нуры - Октябрина Агичева*

Октябрина Ҡытым ҡыҙын был төбәктә яҡшы беләләр. Яҡташтары әйтмешләй ул бик булдыҡлы ҡатын, милли кейемдәр тегә, милли музыка ҡоралдарында ла үҙҙәренең халҡына ғына хас матур көйҙәр уйнай. Шиғырҙар яҙа, йырҙар ижад итә. Ата – бабаларының милли мираҫын һаҡлай. Халҡы, нәҫел тамырҙары, тыуған яғы тураһында ҡыҙыҡһындырырлыҡ итеп яҙылған өс китап авторы.

Беҙ уның менән һөйләшкәндә рус һәм башҡорт телдәрендә сығып килгән «Милләт нуры» гәзитен бүләк итκәс һәләк ҡыуанды.

- Минең Башҡортостандан сығып, Себер тарафтарында төрлө тармаҡтарҙа эшләп йөрөүсе дуҫтарым байтаҡ. Үҙ – ара һөйләшеп, кәңәшләшеп йәшәйбеҙ, бергә табындар ҡорабыҙ, күҙгә – күҙ ҡарашып һөйләшәбеҙ.

- Бынан 10 йыллап самаһы элек минә Башҡортостандың «Яҡтыкүл» шифаханаһында ял итергә тура килде. Ял иткән ваҡытта, мин Башҡортостандың гүзәл тәбиғәтенә һоҡландым, башҡорт халҡы менән аралашып, бик күп дуҫтар таптым - ти Октябрина Ҡытым ҡыҙы.

Октябрина Башҡортостанда шифаханала ял итеп кенә ҡалмай, уның ерлектәге географияһын өйрәнә, урмандарҙы ҡыҙыра, тауҙарға артыла, яҡын – тирәләге ауылдарҙа булып, башҡорт халҡының ғөрөф – ғәҙәттәре, йолалары менән ҡыҙыҡһына.

Әбйәлил районы Байым, Иҫке Балапан ауылдарында, Мәсетле, Салауат районы ауылдарында ла уның дуҫтары бик күп.

- Мин Башҡортостанда булғанда башҡорт дуҫтарым ихласлап саҡырғас «һаумыһығыҙ, ауылдаштар!», «һабантуй» байрамдарында ла ҡатнашып, сығыш яһаным. Башҡорт халҡы үҙенең ябай ҙа, ихлас та, йор һүҙле булыуы, беҙҙең халыҡ кеүек уҡ ҡунаҡсыллығы менән хайран ҡалдырҙы. Мине бигерәк тә башҡорттарҙың милли музыка ҡоралы - ҡурай моңо әсир итнә, оҙон көйҙәре күңелгә һеңеп ҡалды. Башҡорт балын, милли эсемлектәре ҡымыҙын да, талҡан менән ҡоротто ла ауыҙ иттем.



*Владислав Тонкин*
*үҙенсәлекле музей менән таныштыра*

Башҡорт халҡы борон – борондан һунарсылыҡ шөғөлөн үҙ иткән. Ана шул һеҙҙең халыҡтың һунарсылыҡ шөғөлө лә беҙҙең хант, селькуп, ненец милләттәре халҡына яҡынайта. Бейеүҙәрегеҙ ҡатмарлыраҡ күренһә лә, күп элементтары беҙҙекенә оҡшаған. Ғөмүмән беҙҙең халыҡтарҙы борсоған ураҡ мәсьәләләр байтаҡ – үҙ телеңде, милли йолаларҙы һаҡлап ҡала алһаҡ – беҙҙең халыҡ та бөтмәйәсәк – тине ул.

*Буранғол ГАЛИН*

≫ Матбуғат - 2017

# ХАЛЫҠ ГӘЗИТ УҠЫЙМЫ?

***Күптән түгел Башҡортостандың билдәле телевидение журналисы Уйылдан Галин «Рәсәй - Башҡортостан» телеканалының «Рәсәй» медиаүҙәге матбуғат конференцияһы ойоштороғайны. Унда мөһим тема – милли матбуғаттың үҫешенә ҡамасаулаған күренештәр, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүгә арналған төплө фекерҙәр,бәхәсле һөйләшеүҙәр булды. Директор-баш мөхәррирҙәр, журналистар, яуаплы сәркәтиптәр, «Я ПАТРИОТ» һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығында үткән ҡыҙыу бәхәсле йыйылышта ни өсөн гәзит уҡыусыларҙың һаны кәмей, нисек итеп уларҙы милли матбуғатҡа ҡарата ҡыҙыҡһындырырға. Бына ошо һәм башҡа мәсьәләләр ҡуҙғатылды конференцияла.***



*Журналист Уйылдан Галин*

Башҡортостанда дөйөм тираж күрһәткесе кәмеһә лә, 2017 йылға яҙылыусылар һаны артып киткән гәзиттәр ҙә юҡ – юҡ та, бармаҡ менән һанарлыҡ булһа ла бар. Тираж туплауҙа хәбәрсе менән халыҡ, гәзит уҡыусы араһында тығыҙ бәйләнеш урынлаштырырға кәрәк. Ни өсөн халыҡ баҫманы бик уҡып бармай хәҙер? Бының сәбәптәре күп. Гәзит хеҙмәткәрҙәре, төрлө тармаҡтар буйынса уҡымлы мәҡәләләр әҙерләргә тырыша. Баҫмаларҙа ҡағыҙ сифатының насар булыуы, әле һаман гәзиттәрҙең ике – ҡара һәм аҡ төҫтәрҙә баҫылып килеүе. Республика ҡала һәм район хакимиәте етәкселәре лә гәзит – журналдарға яҙылыу барышында тираж арттырыу буйынса әлеккеләй әүҙем ойоштороу эше алып бармай, «административ ресурс» тигән төшөнсә юҡҡа сыҡты. Уҡыусы менән баҫма араһында тығыҙ бәйләнеш юҡ. Республика баҫмалары Рәсәй каталогына индерелмәгән, шуға ла Башҡортостандан ситтә йәшәүсе яҡташтарыбыҙ ҙа баҫмаларҙы үҙҙәрендә яҙҙырып ала алмай. Ә почта аша конверт ысулы менән ебәреү ҡиммәткә төшә. Был тәңгәлдә лә уйланырға урын бар. Тимәк, тираж туплау, халыҡ менән бәйләнеш күперен быңаса тотоп торған уңышлы алымдарҙы яңыртып, бөгөнгө көн шарттарына тап килмәнә – яңыларын уйлап табып эш итеү кәрәк.

«Йәшлек» гәзитенең баш мөхәррире, Башҡортостандың журналистар союзы рәйесе Артур Дәүләтбәков үҙенең сығышында интернеттың халыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерҙәй сифатлы материал бирә алмауы, шуға ла халыҡтың үҙе уҡып өйрәнгән матбуғат сараларына ҡабаттан әйләнеп ҡайтыуы, ҡыуандыра, тине. Үткән йылдың аҙағында «Йәшлек» гәзитенең өс мең данаға артып ун меңгә яҡынлашыуы ла быға асыҡ миҫал. Рәйлә Вахитова үҙенең сығышында, тиражды арттырыу өсөн нидәйҙер эксклюзив материалдар баҫтырғанда, ярылып ятҡан проблеманы уҡыусыға еткергәндә, журналист менән уҡыусының фекере тап килмәнә лә, күтәрелгән мәсьәлә халыҡ менән берҙәй етәкселәрҙе уйландырырлыҡ, ныҡымта яңарлыҡ фекер тыуҙырырға тейешлеген билдәләне.

«Шоңҡар» журналының баш мөхәррир урынбаҫары Мансур Ҡаҙаҡаев, баҫмалар үҙенең уҡыусыһына сифатлы тауар тәҡдим итергә тейеш, тине.

Йәғни насар, сифатһыҙ ҡағыҙҙа баҫылған гәзит менән уҡыусыны йәлеп итеп тә, тиражды арттырып та булмай. Гәзит – журналдар матур, сифатлы ҡағыҙҙа, янып, гөлтләп торған фотолары менән уҡыусыны үҙенә саҡырып торорға тейеш. Шунһыҙ уҡыусының күңелен яулап булмай.

Бынан тыш матбуғат конференцияһында, баҫмаларҙың дәүләттән азат булмауы, шул сәбәпле халыҡтың фекере тулыһынса яҡтыртылмауы, бөтә нәмәнең дә аҡсаһыҙлыҡҡа бәйләнгәнлеге тураһында ла һүҙ булды.

«Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире Гөлназ Ҡотоева үҙенең сығышында аҡса булмау сәбәпле Ырымбурҙа башҡорттарҙың «Караунһарай» гәзитенең туҡтатылыуы, ә Себер тарафтарында киреһенсә рус һәм башҡорт телдәрендә «Милләт нуры» гәзитенең ҡайтанан баҫтырыла башлауын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Әйкәндәй, журналист Уйылдан Галиндың тапшырыуҙарын халыҡ яратып ҡарай. Сөнки ул телевизион тапшырыуҙарында, тура эфир студияһында ниндәй генә тармаҡҡа тотонмаһын тамшасының һыуһынын ҡандырырҙай тематик алымдар менән матур итеп атҡарып сыға, ауыл хужалығы, ауыл тормошо, йә иһә урман хужалығы, сәнәғәт, мәҙәниәт, спорт, мәктәптәрҙә уҡыу – уҡытыу мәсьәләләре буйынса әҙерләнеп эфирға сыҡҡан тапшырыуҙарын бик ҡыҙыҡһындырырлыҡ конфликтлы сюжеттарға ҡоролған һәм тамашасының талабына тулыһынса яуап бирә. Һәр тема буйынса, һәр сығыш яһаусыға анығ һорауҙар биреп, тулы йыйнаҡ композицион алымдар ҡулланып тамашасыға еткереүгә өлгәшә алыуы уны аҡтив һәм бөтә яҡтан да өлгөр һәм оператив журналист булыуын күрһәтә. Әлеге мәлдә Башҡортостан матбуғатына ҡағылышлы мәсьәләләр бик күп. Уны бер ярты сәғәтлек тапшырыуҙа ғына асып һалыу мөмкин түгел. Беренсенән, жанр мөмкинлектәре лә, телевизион эфир ваҡыттары ла, алып барыусы менән берҙәй сығыш яһаусының фекерләү дайраһөн сикләй. Матбуғатҡа, ғөмүмән газета – журналдарға яҙылыу проблемаларына ҡағылышлы телевизион тапшырыуҙарҙы киләсәктә лә ҡарарға насип булһын.



*Милли-матбуғат йыйылышында бәхәсле мәл*

*Буранғол ГАЛИН*

**≫ Хәтер**

# ӘСӘЙЕМ КҮРГӘН МИХНӘТТӘР

***Илебеҙҙә революция ваҡытындағы оло ваҡиғалар башҡорт халҡын да ситләтеп үтмәй. Тарихтан күреүебеҙсә Башҡортостанға, башҡорт халҡына йоғонтоһо бик ҙур була. Бер кеше яҙмышы аша тарихтың ниндәйҙер осорон күҙ алдына баҫтырып була. Ҡәйнәм Аҡсурина Ғәлиә әсәһе Мөрсәлимова Нәғимә Камалетдин ҡыҙы хаҡында тәүге тапҡыр бәйән итмәй. Уның һөйләгәндәре газета уҡыусыларын да битараф ҡалдырмаҫ тип яҙырға булдым. Һәр кешенең яҙмышы - үҙе йәшәгән осорҙоң сағылышы бит ул.***



**Мөрсәлимова Нәғимә**

Нәғимә Башҡортостандың Федоровка районы Балыҡлы ауылында 1922 йылда Камалетдин менән Зәйнәп ғаиләһендә тыуған. Камалетдин - ҡулынан эш килгән, егәрле һәм, үҙ ваҡытына күрә, ауылдың хәлле генә кешеһе була. Әбейе мәрхүмә булып, алты ҡыҙы менән яңғыҙ ҡалғас, күрер күҙгә күркәм Зәйнәпте ҡатынлыҡҡа һората. Зәйнәп Ҡараласыҡ тигән күрше ауылдан бик ярлы ғаиләнән була. Камалетдин ҡарт киләсәктә йорт һалырға һәм мәһәренә һыйыр бирергә вәғәҙә иткәс, ҡыҙҙарын ниһайәт кейәүгә бирергә риза булалар. Бабай һүҙендә тора, яҡшы йорт һалып бирә, һыйырын да килешкәнсә мәһәргә бирә. Алты ҡыҙҙың өсәүһе йәш ҡатын Зәйнәптән олораҡ була.

Балыҡлы - заманында үҙ баҙары, бер нисә мәсете булған бик ҙур ауыл.

Камалетдин бабай ауылдағы кейәүҙәре, туған тейешле Хөснөтдин бабай ғаиләһе менән иген үҫтереп, бер нисә һыйыр, ике ат, күпләп ваҡ мал аҫырап, матур итеп донъя көтөп йәшәй. Ошолай матур итеп йәшәп ятҡанда коммунистар барлыҡҡа килеп, коммуна ойошторолоп байҙарҙы тентеү, эҙәрлекләү башлана. Камалетдиндың мал-тыуарын, ашлыҡтарын ғына түгел, хәләл көс менән йыйған донъяһын туҙҙырып, өй эсендә бер нәмәһен ҡалдырмай алып сығып китәләр. Көн һайын тиерлек килеп, «ҡалған малдарыңды ҡайҙа йәшерҙең», - тип, ҡартты туҡмайҙар. Был туҡмалыуҙарҙан һуң бабай имгәнеп тора алмаған. Зәйнәп, ҡарты имгәнгәс, уны ташлап ауылына ҡайтып китә. Бабайҙың бер туғаны Хөснөтдинде Нуриман яғына ҡыуғандар. Тағын бер туған Мәрхәбә һәм Ғабдрахман ауылда ҡала. Һуңынан был бер туғандар башҡаса бер ҡасан да күрешмәйенсә йәшәп донъя ҡуялар.

Үрҙә әйтелгәнсә, Зәйнәп, имгәнгән Камалетдинды, 8 йәшлек Нәғимәне, мейес башында аңһыҙ булып ҡыҙылса менән ауырып ятҡан Мөхәммәт һәм Ғәлимә балаларын ҡалдырып, Ҡараласыҡ ауылына ҡайтып китә. Зәйнәп шул балаларҙы, үҙе ярҙамға мохтаж булып ятҡан ҡартҡа ни йөрәге менән ташлап киткәндер, уныһы беҙгә ҡараңғы. Бәлки, ғүмер буйы кулак ҡатыны мөһөрөн күтәреп йөрөү ҡурҡынысы ошо аҙымды яһарға мәжбүр иткәндер.

Ошо ауырыуҙан ике бала үлеп ҡала. Нәғимә олораҡ булғанғамы икән, ғүмере лә булғандыр инде, иҫән ҡала. Камалетдин ҡарттың оло ҡыҙы Шәрифә менән ире уларҙы ҡарай. Элек тиҙәк һуғып, киптереп, шуны яндырып, ҡаҙан элеп ашын да бешергәндәр, сәйен дә шунда ҡайнатҡандар. Нәғимә лә яйлап ҡул араһына керә. Йәйгә аяҡ баҫҡас, бабай: «Бар, ҡыҙым, әсәйеңде алып ҡайт»,- тип 5-6 саҡрым алыҫлыҡтағы ауылға ебәрә. Ҡыҙ ауылға тиклем бер туҡтауһыҙ йүгерә, әсәһенә атаһының үтенесен еткерә. Әммә әсәһе өйгә ҡайтмаясағын белдереп, кире бороп ҡайтарып ебәрә. Нәғимә юл буйы ғәрлегенән илап ҡайтып барыуын ғүмере буйы онотмай.

...Бар ауыл халҡы Һабантуйға ҡуҙғалғанда, Камалетдин ҡарт фани донъя менән хушлаша. Бына шунан алып Нәғимә өсөн михнәттәр башлана ла инде. Кулак балаһы тип, үҙ өйөнән ҡыуып сығарып, тыуған йортона сит кешеләрҙе индерәләр. Уҡырға тип барған еренән, кулак балаһы, тип мәктәпкә индермәйҙәр. Күрше Ғариф исемле уҡытыусы ағай, мин хеҙмәттән ҡайтҡас һине уҡытырмын, ә һин Рәхимә апайыңа балаларҙы ҡарашып тор, ти. Әммә һуғыш башланып ул шул китеүҙән ҡайтмай.

Нәғимәне Хәбибә исемле ҡарсыҡ үҙенә йәшәргә индерә. Ун ике йәштән ауыл фермаһына башҡа ҡыҙҙар, егеттәр менән бергә эшкә инә, һарыҡтар ҡарай. Ситкә эшкә ебәреүҙәр башлана. Яҡлаусыһыҙ, ҡараусыһыҙ ҡалған Нәғимәгә һис тынғы юҡ. Бер ваҡыт башҡа ҡыҙҙар менән Мәскәү янындағы Владимир тигән ауылға килтерәләр. Бик яҡында ғына һуғыш бара, шартлауҙарҙан тәҙрә өлгөләре сылтырап тора. Көндөҙ ҡыҙҙар емерелгән йорттарҙың сүптәрен өйһә, төндәрен яралыларҙы бәйләргә, пистолет, мылтыҡтарҙы һүтеп-йыйырға өйрәнәләр.

Бер көндө ике милиционер килеп Нәғимәне алып китә. Һаман да бөтә бәлә кулак балаһы булыуынан икәнен аңлап үртәләнә ул. Ҡыҙҙы баржаға ултыртып һыу буйлап Себерҙәге төрмәгә урман киҫергә алып китәләр. Нәғимә менән тағын өс ҡыҙ эшләй. Уларға ағас ҡырҡыу буйынса көндәлек норма ла билдәләнә. Ҡырҡҡан ағастарҙы ботаҡтарынан таҙартыу, уларҙы яндырып, бүрәнәләрҙе өйөп ҡуйыу, ҡыҫҡаһы, тын алырға ла ирек бирмәйҙәр. Көндәлек планды үтәһәң генә икмәк, һоло, тәмәке бирелә. Тәмәкеләрҙе тартҡан кешеләргә биреп, икмәк-һолоға алмаштыра Нәғимә. Былай тамағы туҡ, әммә үҙәккә үтерлек һалҡындарға ғына түҙерлек түгел. Бер көн бик ҡаты һалҡында аяҡ-ҡулдарын туңдырып, иҫен юғалтып йығыла. Төрмә дауаханаһында ғына аңына килә ул. Дауалаусы табип, йәш ҡыҙҙың «шәхси эше» менән танышып, кулак балаһы булғаны өсөн ошо төрмәгә эләккәнен белә. Иң ҡыуандырғаны шул, был табип бәләкәй сағында атаһы менән Балыҡлы баҙарына йөрөгән. Табип та малай ваҡытындағы хәтирәләре менән Нәғимәнең бала сағын, икеһе лә атайҙарына эйәреп йөрөгән ҡыуаныслы бала саҡ мәлдәрен төҫмөрләй. Табип сығышы менән Ырымбур юлы буйында ултырған Сыңҡан тигән ауылдан була. Ауылдың икенсе исеме Һайыҫҡан. Боларыш ваҡытында был малайҙы ла кулак балаһы тип эҙәрлекләй башлағас, Ишембайҙағы бабайы уның документтарын үҙгәртеп, кулак балаһы мөһөрөн юйҙыртып, табиплыҡҡа уҡыта. Табип Нәғимәгә, мин һине дауалап, төрмәнән сығырға ярҙам итермен, тигән. Ҡурсалаусы һүҙендә тора, уға юллыҡ аҡса, ашарға биреп, баржаға тиклем оҙата. Унда үҙенең ышаныслы кешеһенә беркетеп, алып ҡайтырға ҡуша. Нәғимәнең документтарын да, аҡсаһын да ошо оҙон плащ кейгән кешегә тапшыра. Был кеше лә үҙенең ҙур ҡапсығы менән сумаҙанын Нәғимәгә биреп, һораһалар, үҙемдеке, тип әйтергә ҡуша. Бының шикле әйберҙәре менән мине уғрылыҡта ғәйепләп тағын төрмәгә ултыртып ҡуймағайҙары, тип нык борсола ҡыҙ. Ниһайәт, Өфөгә лә барып етәләр. Теге юлдашы ла, Нәғимәгә аҡсаһын, документтарын тапшырып, үҙ юлы менән китә. Ул заманда йәйәүләп тә, ат менән дә юлда йөрөүселәр күп була. Кейемдәре ҡот осҡос хәлдә була Нәғимәнең, шуға ла кешегә туҡтап тормай. Ҡайҙа йәйәү, ҡайҙа ат менән бер нисә көндә Мәләүезгә барып етә. Тыуған ауылына ла ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтып инеп, Шәрифә апай менән Сәхи бабайҙарға юллана. Ике йыл инде хәбәре лә булмаған Нәғимәне иҫән-имен күреп яҡындары бик ҡыуана.

Элек бергә йәшәгән Хәбибә әбейенә инеп йәшәй башлай. Туғандары, тәүге һoраткан кешегә кейәүгә сыҡ, былай яңғыҙ булһаң тағын ситкә сығарып ебәрерҙәр, тип кәңәш итәләр. Шуға ла бер көндө, күрше ауылдан яусы килгәс, Нәғимә күп уйлап тормай риза була. Был ирҙең ҡатыны бала тапҡанда үлеп китә, уның яңы ғына атлай башлаған бер йәштәр самаһындағы ҡыҙ балаһы була. Дүрт йыл йәшәгәндән һуң ҡыҙ балалары тыуа. Аслы-туҡлы көн иткән, һуғыштан һуңғы юҡлыҡ ваҡыты. Ауылда ирҙәр юҡ, яңғыҙ ҡалған ҡатын-ҡыҙҙар күп. Ире Нәғимәне ҡыуып сығарып, икенсе ҡатын ала. Туғандары Нәғимәне, бәрәңгеңде ҡаҙып алмайынса айырылма, һыйырыңды ла алып ҡайт, балаңды үҫтерергә кәрәк бит, тип өйрәтәләр. Нәғимә, төнөн үҙенең һыйырына ике ҡапсыҡ бәрәңге бәйләп, балаһын күтәреп, атаһы яғынан туған тейешле Мәрхәбә тигән кешегә барып төпләнә.

Күп ауырлыҡтар кисереп Нәғимә балаһын яңғыҙ үҫтерә. Үҙ доньяһы барлыҡҡа килеп, бер аҙ тормошо яйланғас, ҡасандыр ауыр яҙмышҡа дусар итеп ташлап киткән әсәһе Зәйнәп уның ғүмер юлында пәйҙә була. Бер нимә лә булмағандай ҡыҙына килеп айҙар буйы ҡунаҡ була. Нәғимә уны күптән ғәфү иткән, шулай ҙа бала сағындағы үпкәһе ғүмерлеккә уның йөрәгендә уйылып ҡала. Зәйнәпкә булған үпкәле хис-тойғоларын үҙенең берҙән – бер ҡыҙы, минең ҡәйнәм Ғәлиә Сәмиғулла ҡыҙы Аҡсурина менән уртаҡлашҡан ул.

Инде нисәнсе тапҡыр был ҡатмарлы осор, ауыр яҙмышлы ябай ҡатын тураһында тыңлайым, әммә был хикәйәт мине төрлө ауыр уйҙарға һала, тетрәндерә. Әлбиттә, былдай яҙмышлы кешеләр күп булғандыр ул ваҡытта. Ниндәй осорҙа йәшәһә лә һәр кеше үҙенсә яраҡлашып донъя көтөргә, бәхетле булырға тырыша. Йылдар уҙа бара Ваҡыт һәр кешене яҙмышына ярашлы үҙ урынына ҡуя. Көслө рухлы кеше һәр ваҡыт Кеше булып ҡала. Нәғимәгә лә заман ауырлыҡтарына бөгөлмәй, яҙмыш һынауҙарын үтергә уның бәхетле киләсәккә булған матур өмөттәре, күңел байлығы, сабырлығы ярҙам иткәндер, тип уйлайым мин.

*Гөлнара АҠСУРИНА*

**≫ Кәрәҙ**

# ӘЙҘӘГЕҘ, БЕРГӘЛӘП УЙНАЙЫҠ!

***Бала саҡ һәр кем өсөн тормоштоң иң татлы, яҡты мәле булып иҫендә ҡалғандыр. Бигерәк тә күмәкләп уйнаған уйындар шундай матур хәтирәләр ҡалдыра күңелдә. Халҡыбыҙ борон-борондан киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. «Ҡарға бутҡаһы», «Кәкүк сәйе» һәм башҡа байрамдарҙа балалар өсөн төрлө уйындар ойошторолған. Уйын — күңелгә ҡыуаныс, йыуаныс ҡына биреү менән сикләнмәй. Көндәлек тормошта ла сабыйҙарҙың донъяны танып белеүендә, физик һәм рухи яҡтан үҫешендә, дуҫлыҡ, берҙәмлек хистәре тәрбиәләнеүендә, һәләттәрен асыуҙа, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәтеүҙә уйындар ярҙамға килгән. Баланың кем икәнен белгең килһә, уйынына ҡара тигәндәр. Сираттағы «Кәрәҙ» рубрикаһы онотола барған халҡыбыҙ уйындарына бағышлана.***



***«Аҡ тирәк, күк тирәк»*** - күптәргә таныш һәм яратып уйналған уйындарҙың береһе. Уның асылы шунда: балалар ике төркөмгә бүленеп, бер-береһенән 20-30 метр алыҫлыҡта ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡапма-ҡаршы баҫалар. Беренсе яҡтағылар һамаҡлай:

Ҡабыр-ҡабыр ҡабырсаҡ,  
Ат башында кимерсәк.  
Аҡ тирәк, күк тирәк  
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?  
Икенсе яҡ яуаплай:  
Аҡ тирәк, күк тирәк  
Ал да кәрәк, гөл дә кәрәк,  
Беҙгә иң матур йырсыбыҙ  
Гөлсөм атлы ҡыҙ кәрәк.

Исемен ишеткәс тә Гөлсөм йүгереп бара ла, ҡаршы рәттәге ике кешенең араһын өҙөп үтә (Ҡул менән бәләккә өҙә һуға). Өҙә алһа, ике ҡыҙҙы үҙе алып китә, өҙә алмаһа үҙе ҡала ҡаршы рәттә. 3-4 бала ҡалғансы шулай алмашлап уйнайҙар.

***Осто-осто***

Уйынсылар теҙелешеп ултыра йәки баҫып тора. Алып барыусы оса торған һәм осмай торған нәмәләрҙе буташтырып әйтә лә ҡулын күтәрә:

- Осто-осто – торналар осто.
- Осто-осто – тырмалар осто.
- Осто-осто – ҡарғалар осто.
- Осто-осто – арбалар осто.

Башҡалар тик осоусы әйбер әйтелгәндә генә ҡул күтәрергә тейеш. Кем осмай торған әйбер әйтелгәндә ҡулын күтәрә, шул йә алып барыусыны алмаштыра, йә уйындан сығарыла, йә берәй “яза”ға тарттырыла: йырлай, бейей, шиғыр уҡый һ.б.

Главный редактор: Бурангул Галин.
Редакционный совет: Ляйсан Аксулпанова, Денис Абдуллин, Ильшат Бикбулатов.
Контакты: 89124209483, bashkirlife@mail.ru.
Верстка и печать в типографии ООО «Полиграфия», 453261, РБ, г. Салават, ул. Ленина, 5/11, тел. (3476) 35-31-02.
Тираж 999 экз. Заказ 2633.

Спонсор издания ООО «Лидер Транс»
Основной вид деятельности:
автотранспортные услуги.
Генеральный директор:
Ирик Фахретдинович Максютов.